## 6–сы практик эш

**Темаһы:** Кешене хеҙмәт биҙәй. Труд украшает человека.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** телмәрҙә алмаштарҙы ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение местоимений в речи.

**Маҡсат:** хеҙмәт тураһында әңгәмәләшеү, алмаштарҙы ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.

2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж**

| № | Алмаш төркөмсәләре | Миҫалдар |
|---|---|---|
| 1 | Зат алмаштары (личные местоимения) | мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар |
| 2 | Эйәлек алмаштары (притяжательные) | минең, һинең, уның, беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың |
| 3 | Күрһәтеү алмаштары (указательные местоимения) | был, шул, анау, ана, теге, ошолай, былай |
| 4 | Һорау алмаштары (вопросительные местоимения) | кем, нимә, нисә, ниндәй, ҡайҙа, ҡайһы, нисек |
| 5 | Билдәләү алмаштары (определительные местоимения) | һәр кем, һәр нимә, һәр ниндәй, һәр ҡайһы, һәр нисек |
| 6 | Билдәһеҙлек алмаштары (неопределенные местоимения) | кемдер, нимәлер, ҡасандыр, ҡайҙалыр, нисектер, әллә кем, әллә нимә |
| 7 | Юҡлыҡ алмаштары (отрицательные местоимения) | һис кем, һис нимә, һис ҡасан, һис нисек, һис ҡайҙа |

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем.** Тексты тәржемә итегеҙ (переведите текст):

Ҡурайсы – уҡытыусы

Башҡортостандың халыҡ артисы, ҡурайсы – уҡытыусы Рәхимов Ришат Рәшит улы Баймаҡ районында тыуған. Ҡурайҙа уйнарға ул ҡурайсы – сәсән Кәрим Дияровтан өйрәнә. Рәхимов Ришат, урта мәктәпте тамамлағас, Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай класына уҡырға инә. Бында Ғата Сөләймәнов

уның яраҡкан уҡытыусыһы була. Училищены тамамлағас, Ришат Рәхимов үҙе лә уҡыта башлай.

Ҡурай класында егерме йылдан ашыу эшләү ваҡытында ул бик күп ҡурайсылар тәрбиәләне. Шулар араһында Ишморат Илбәков, Рәсүл Ҡарабулатов та бар.

Ришат Рәхимов ҡурайсылар ансамблен ойошторҙо. Был ансамбль Республика, Рәсәй, Халыҡ –ара конкурстарында лауреат исеменә лайыҡ булды.

**Һүҙлек:**

ашыу – более

тәрбиәләне – воспитал

лайыҡ булды – удостоился

шулар араһында – среди них

ойошторҙо – организовал

халыҡ - ара – международный

**2 – се бирем.** Алмаштарҙы күсереп яҙығыҙ. Рус теленә тәржемә итегеҙ **(**Спишите местоимения. Переведите на русский язык): кем, нимә, нисә, ниндәй, ҡайҙа, ҡайһы, нисек һәр кем, һәр нимә, һәр ниндәй, һәр ҡайһы, һәр нисек кемдер, нимәлер, ҡасандыр, ҡайҙалыр, нисектер, әллә кем, әллә нимә һис кем, һис нимә, һис ҡасан, һис нисек, һис ҡайҙа.

**3 – сө бирем.** Һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, алмаштарҙың төркөмсәләрен билдәләгеҙ (Спишите предложения, орпределите разряд местоимений):

1.**Һәр кем** хеҙмәт яратырға тейеш.2**. Беҙ** хеҙмәт дәрестәрен яратабыҙ.3. **Кем** матур йорттар һала? 4. **Был** егет колхозда бригадир булып эшләй. 5.**Кемдер** эшкә бик еңел ҡарай. 6. **Кем** эшләмәй – **шул** ашамай.

**4-се бирем. Вариантлап эшләү.** Алмаштар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ (с данными местоимениями составьте предложения):

**1- се вариант:** 1. Минең 2. Кем 3. Был.

**2- се вариант:** 1.Мин 2.Ҡайҙа . 3. Беҙ.

**5-се бирем.** Бирелгән мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ, икәүһен башҡорт теленә тәржемә итегеҙ (спишите данные пословицы, две из них переведите на башкирский язык): 1. Не красна жизнь днями, а красна делами. 2.Век живи – век трудись. 3.Жизнь дана на добрые дела. 4.Жизнь, прошедшая в труде – золотая жизнь. 5.Жизнь коротка, не трать ее впустую.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң**

**студент белергә һәм эшләй һәм ҡуллана белергә тейеш:**

1.Хеҙмәт, эш, тураһында, уларҙың әһәмиәтен билдәләргә, алмаштар, уларҙың төркөмсәләрен билдәләргә,

2.Һөйләмдәр төҙөү, алмаштарҙың төркөмсәләрен билдәләү буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Ниндәй алмаш төркөмсәләрен беләһегеҙ? 2. Миҫалдар килтерегеҙ.

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 169-170 -се биттәр, Л.2.49 – сы бит. Хеҙмәт тураһында мәҡәлдәр яҙырға.

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.